Талха ҒИНИӘТУЛЛИН

# Немец

## Хикәйә



2-се бригаданың Максим баҫыуында парға ер һөрә инеләр. Бригадир Ғәлиәхмәт һуғыш башланыу хаҡында хәбәр еткерҙе. “Аттарығыҙҙы туғарығыҙ ҙа ҡайтығыҙ”, — тине ул күбеккә батҡан атын саҡ тыйып. Был хаҡта ишеткәс, Рәхмәтулла, Исхаҡ ағайҙарҙың йөҙҙәре ҡарайып, яңаҡтары тартылды, Мәхмүт иһә балаларса шатланды: ниһайәт, ҡыҙыҡ тормош башлана! Тик шуныһына үкенде — һуғыш бер айҙан Ҡыҙыл Армияның еңеүе менән тамамланасаҡ, ул үҫеп өлгөрмәй ҡала һәм немец менән геройҙарса һуғышырға фронтҡа барып етә алмаясаҡ.

Мәхмүт өсөн һуғыш шул йылдың август аҙағында башланды, ә ул Ҡыҙыл Армияның еңеүе менән тиҙ тамамланманы, киреһенсә, оло утҡа әйләнеп, тыуған илде үҙенең ҡара ҡоромо менән тамам солғап ала барҙы.

Дөм ҡараңғы бер кистә ул клубтан ҡайтырға сыҡты. Унда бер нисә кеше детекторлы радиоалғыстың сыйылдауы, һыҙғырыуы, шаулауы аша фронт хәлдәре тураһында мәғлүмәт тыңланы. Немецтар Мәскәүгә ябырыла, Ҡыҙыл Армия сигенә... Фин һуғышында яраланып ҡайтҡан Шәмғолов ҙур ышаныс менән: “Беҙҙекеләр Мәскәүҙе бирмәйәсәк, иптәш Сталин быға юл ҡуймаясаҡ”, — тине. Ҡурҡыныс, шомло кис ине. Ҡапыл Садиҡов Исламдың өйө тапҡырында ҡараңғы урам эсенән ике шәүлә пәйҙә булды ла унын юлын быуҙы. Былар урыҫ егете Мишка Мордасов менән Исламдың кинйә улы Шәрәф ине. Тоҡос кәүҙәле, етмәһә, сирләшкә генә Шәрәф, үҙенең иптәштәре әйтеүенсә, мәкерле, әсе телле һәм хәйләкәр “етлекмәй тыуған нәмә”. Әсәһе уны һыуҙан ҡайтып килгәндә ҡарынынан “төшөргән”. Бына хәҙер арба тәгәрмәсенән дә тәпәшәк шул нәмәкәй юха эт һымаҡ оҙон Миша Мордасовтың аяғы араһында бутала. Ә Миша Мәхмүткә дуҫтарса мөғәмәләлә.

Шәүләләр тәңгәленә еткәс, Мәхмүт Шәрәфтең мыҫҡыллы тауышын ишетте:

— Әһә, эләктеңме, немец! Хәҙер кәрәгенде бирәбеҙ!

Мәхмүт малайҙарҙың эргәләренән үтеп китергә ниәтләнгәйне лә, һүҙ ҡатмай йылмайып ҡарап торған Миша менән йөҙгә-йөҙ бәрелде лә ҡуйҙы. Мәхмүт көсөргәнешле йылмайҙы, ҡапыл-ғара өндәшмәне, шунан көттөрөп кенә, мөмкин ҡәҙәр тыныс булырға тырышып:

— Ниңә бәйләнәһегеҙ әле? — тине.

— Һин, немец, беҙҙең урамдан йөрөмә, үҙеңдең Гитлерыңа кит! — тип кәпәрәнде Шәрәф.

— Мин ниндәй немец булайым? Мин немец булһам, һин — ҡытай, — тип шаяртырға маташты Мәхмүт.

— Дөрөҫ, ул китаец, Ван-Ли-Чан, — тип көлдө Мишка, мәктәп дәреслегенән нимәлер хәтерләп.

— Бының кеүек немец булғансы, ҡытай булғаның яҡшыраҡ, — тине Шәрәф.

— Мин немец түгел! — тип үпкәләй башланы Мәхмүт. Малайҙарҙы ул шаярта тип уйлай ине.

Ауылда бер немец бар ине, йәғни немец теле уҡытыусыһы Ибрай Хаматов. Әлепте таяҡ тип белмәһә лә, Маркс менән Тельманды уҡытҡан һымаҡ уҡыта ине. Хулиган Тәлғәт уҡытыусыларҙың барыһына ла тиерлек ҡушамат тағып бөткән. Үгеҙ, Аҡһаҡ ат, Мулла, башҡа исемдәр. Әлеге Хаматовтың ҡушаматы “айн-цвай-драй” булды.

— Немец! Айн-цвай-драй! — тип ҡысҡырҙы Шәрәф.

— Мин — башҡорт! Фамилиям Юнысов, исемем Мәхмүт! — тине Мәхмүт. Был юлы тыныс ҡына әйтте.

— Һине әсир немец “яһағанды” бөтә ауыл белә. Әсәйеңде ауырға ҡалдырған да Германияһына һыпыртҡан, ул китеү менән әсәйеңде аҡһаҡ Рәхимгә биргәндәр.

— Нимә һөйләйһең? Хәҙер мин һине...

Мәхмүт Шәрәфтең пальто яғаһынан ике ҡуллап ҡарманы ла тегене ҡапыл үҙенә тартып, бар көсөнә артҡа этеп ебәрҙе. Шәрәф тәнтерәкләп Садиҡовтар ҡапҡаһы алдындағы күләүеккә йығылды. Мишка маһмайын яҡлашып бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Мәхмүт өйөнә ашыҡты. Ниңә немец? Уның атаһы Юнысов Рәхим булғас, ул нишләп немец һуң? Атаһы ғүмер буйы тимерлектә тимер сүкене. Эсмәй, һуғышып йөрөмәй, ауылдың ихтирамлы, кәрәкле кешеһе. Әсәһе лә уны ярата. Мәхмүттең Мөждәбә исемле ҡустыһы, Гөлбикә исемле һеңлеһе лә бар. Улайһа, улар ҙа немец булып сығамы? Эйе, ҡайһы бер әсе телдәр, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ, Мәхмүттең атаһына оҡшамағанына ишаралай. Рәхим кәүҙәгә бәләкәй, йөҙгә ҡара, алға эйелеберәк йөрөй, оҙон ҡуллы, ә Мәхмүт — уҡлау ише буйсан, һары сәсле, һоро күҙле, башҡортҡа бер ҙә тартмаған.

Әсәһе ихатала көндәлек эштәрен ослап йөрөй ине. Улын күргәс, иғтибарһыҙ ғына һораны:

— Радио нимә ти? Һуғыштың ҡасан бөтөрөн әйтмәйҙәрме?

— Ҡөт, әле генә бөттө, ти. Һуғыш ауылда ла бара.

— Нисек ауылда бара?

Мәхмүт үҙенең Шәрәф, Миша менән осрашыуын һөйләне. Өйгә инделәр. Ҡустыһы менән һеңлеһе оло яҡта күптән түгел генә алынған лампа яҡтыһында дәрес әҙерләй, атаһы, ғәҙәттәгесә, йоҡларға ятҡан. Әсәһе Мәхмүттең клубтан шулай һуңлап ҡайтҡан сағында һәр ваҡыт аш-һыу мөйөшөндәге өҫтәлгә бер көрөшкә һөт ҡуя. Мәхмүт икмәк ҡыйырсығы менән әлеге һөттө эсә генә башлағайны, әсәһе һикегә сүгәләне лә баҫынҡы тауыш менән һүҙ башланы:

— Һин уларҙы тыңлама. Садиҡовтар һәр саҡ көнләште, беҙҙең турала юҡ-бар хәбәр таратты. Ярлы йәшәмәйбеҙ, атайың ғүмер буйы эштә, эсмәй, ҡулы эш белгәнгә кешеләр ихтирам итә.

— Ә ниңә улар мине немец тип үсекләй?

Әсәһе күңелһеҙ генә башын сайҡаны, күрәһең, әллә ҡасанғы ваҡиғаларҙы хәтеренә төшөрҙө:

— Беренсе Герман һуғышы ваҡытында беҙгә әсир немецтарҙы килтерҙеләр. Улар рудникта алтын йыуҙы. Ягодкинола булды бараҡтары. Ауылға килеп йомортҡа, май, башҡаһын һатып алалар, ял көндәрендә хужалыҡта ла ярҙам иткеләйҙәр, утын бысалар, тиреҫ сығаралар. Ирҙәр бит һуғышта. Олатайың иртә үлде, атайың Рәхим бәләкәй ине әле. Шул бәләкәйлеген күрепмелер, уға бер немец тимерлектә ярҙам итә башланы. Ҡулы оҫта ине. Күп нәмәгә өйрәтте атайыңды. Ә Рәхмәтулла ағайың шулар янына рудникка йышланы, немец телендә һөйләшергә өйрәнеп алды. Әйҙә ҡабатла, айн-цвай-драй, тип аптыратып бөтә торғайны. Бер көн шулай йәш кенә немецты эйәртеп ҡайтҡан. “Был — Оскар, минең дуҫ”, — ти. Аҙаҡ бер-береһенә йөрөшә башланылар. Рәхмәтулла — уларға, немец — беҙгә. Тик уға оҙаҡҡа ҡалырға ярамай, тикшереп торалар. Әсир бит.

Батшаны ҡолатҡас, немецтар ҡайтып китте, рудникты ташланылар. Ә Оскар тороп ҡалды. Олатайың һуғыштан ҡайтманы. Хужалыҡ ҙур ине, дүрт ат, биш һыйыр, һарыҡтар, кәзәләр. Оскар беҙгә эшкә төштө лә ҡуйҙы. Малды беренсе ҡар төшкәнсе яланда йөрөтә инек, ҡайын сауҡалығы артында бәләкәй өйөбөҙ ҙә бар ине. Мин унда яңғыҙ ҡалырға ҡурҡа инем, ун дүртем дә тулмағайны бит,

ә Рәхмәтулла бөтөнләй бәләкәй. Оскар менән беҙ йәй буйы көтөүҙә. Ул беҙҙеңсә апаруҡ һөйләшергә өйрәнеп алды. Ауылда Ғәскәр тип йөрөттөләр. Тауҙар яғына күрһәтә лә: “Ошо юлдар артында... Германия”, — ти. Һағынғандыр. Ҡағыҙға тауҙарҙы төшөрә, киткән сағында, һеҙҙең тауҙарҙы мәңге иҫләрмен, ифрат матур урындар, тине.

— Әсәй, мин уға оҡшағанмынмы? — тип һораны ҡапыл Мәхмүт, әсәһен бүлдереп.

— Ни һөйләйһең һин? Бер ҡасан да улай тимә! — Әсәһе ҡурҡып китте лә ялт итеп ҡустыһы менән һеңлекәше дәрес әҙерләгән оло бүлмәгә ҡараны. — Һин олатайыңа оҡшағанһың. Ул да кәүҙәгә буйсан, һары сәсле ине. Ә уның атаһы беҙҙең яҡҡа ҡайҙандыр мишәр яғынан килгән. Был турала атайыңа өндәшә күрмә. Ул былай ҙа әлеге ләстит хәбәрҙәрҙән ялҡып бөткән. Борсома.

Һәм Мәхмүт оҙаҡ йылдарға ауыҙын япты.

* * *

Шулай ҙа Мәхмүт һуғыш ялҡынына инеп өлгөрҙө. Запастағы полкта аслыҡҡа, һыуыҡҡа өйрәнеп-сынығып Польшаның Нарев тигән йылғаһы буйында ул тәүге тапҡыр һуғышта ҡатнашты. Һул яурынына мина ярсығы тейеп, Көнсығыш Пруссия сигендәге госпиталдә ятты. Госпиталдән һуң 5-се кавалерия корпусының 17-се часына барып эләкте. Бына ошонда кәрәк булды ла инде уға малай сағында уҡ өйрәнгән ат дағалау һөнәре. Ҡыш башында аттарҙың тояҡтары ҡарлы юлда эҙ ҡалдыра, тая, шуға ла уларҙы дағаларға кәрәк ине. Бына ул Көнсығыш Пруссия, бына ул герман ере. Айн-цвай-драй...

Юҡ-юҡта тоҡос Шәрәф, Мишка Мордасов менән булған һөйләшеү иҫенә төшкөләне. Бындай саҡтарҙа үҙе әле яҡты донъяға килмәгән ваҡытты, алыҫ үткәндәрҙе күҙ алдына килтерергә тырышып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелә. Ул егерме бишенсе йылда тыуған. Герман һуғышы ун етенсе йылда бөткән. Оскар өләсәһендә, күрәһең, егерме дүртенсе йылға ҡәҙәр йәшәгән. Әсәһе атаһына шул уҡ егерме дүртенсе йылда кейәүгә сыҡҡан. Улайһа, Шәрәфтең хәбәре дөрөҫкә тура килә түгелме? Тимәк, уның атаһы аҡһаҡ тимерсе Рәхим түгел, ә немец Оскар-Ғәскәр булып сыға. Аҙ һүҙле, оҫта ҡуллы, уға бер ҡасан да тауышын күтәрмәгән, бер ниндәй дәғүә белдермәгән, тыныс ҡына үҙенең һөнәренә өйрәткән атаһын Мәхмүт ныҡ ярата, уның ҙур, ҡаты ҡулдарын, тир еҫен үҙ итә. Шәрәфтең әйткәндәре хаҡ булып сыҡһа, ниндәй аяныс! Тыуҙырған кеше атай түгел, тәрбиәләгән кеше атай, тиһәләр ҙә, хәбәр дөрөҫкә сыҡһа... Ауылда ошоно белгән һәм үҫеп кенә килгән малай күңелен яралап, хәҡиҡәтте әйткән кешеләрҙең насарлығын әйт әле...

Көнсығыш Пруссияла барған һуғыштарҙа ла, Кенигсбергты ҡамауға алғандан һуң, Балтик диңгеҙенә сығып, ҡамалған дошман частары көнбайышҡа шыҡыйғанда ла улар биләгән ерҙәр Германия территорияһы һымаҡ түгел ине әле. Сөнки улар ишеткән ифрат төҙөк, таҙа, заманса ауыл, ҡасабалар әлегә осраманы. Ҡупшы ауыл-хуторҙар Одер йылғаһының теге яғында ғына күренә башланы. Ер шарының бар мөйөшөндәгесә, Германияла ла шундай уҡ кешеләр йәшәй булып сыҡты.

Хыялдарҙа иһә бөтөнләй икенсе күренеш ине: томанлы көнсығыштағы Азия ҡалалары майҙандарында еңеүсе фанфарҙар уйнай, таш урамдар буйлап дағалы итекле фюрерҙың тимер һалдаттары үтә һәм мендәрсә тамаҡ “Хайл, хайл, хайл!” тип һөрәнләй, фюрер үҙе трибунала торған көйө ҡулын алға һоноп йылмая. Ә

осо-ҡырыйы күренмәгән Рәсәй киңлектәрендә, тулы һыулы йылғалар, күлдәр, быуалар ярҙарында, бай ялан-туғайҙар, ҙур уңыш биреүсе баҡсалар араһында аҡ мираждар ҡалҡып сыға, немец теле яңғырай, төрлө сәскәләргә күмелгән газондарҙа таҙа немец балалары уйнай, ә баҫыуҙарҙа күндәм совет ирҙәре, ҡатындары бил бөгә...

Әммә көнсығыштан тупаҫ туҡыманан тегелгән шинель кейгән, ҡыҫыҡ күҙле, окоп, тиреҫ, тупраҡ, ат һәм тәмәке еҫе аңҡып торған рус мужигы килеп сыҡты ла, кирза итектәрендәге шпорҙарын шылтыратып, тәҙрәләренә селтәрҙәр ҡоролған, йомро өҫтәл өҫтәренә таҙа аҡ ашъяулыҡтар ябылған, абажур эленгән бөхтә йорттарға инеп, ҡарт-ҡороноң, ҡатындарҙың ҡоттарын алды. Немец еренә һуғыш менән килә торған аслыҡ, ҡурҡыу, кәмһетелеү һәм хәлдәренең аяныслығын һуңлап аңлау килде.

Мәхмүт был илде, кешеләренең сит-ят йөҙҙәрен, көнкүрештәрен, хужалыҡтарын иғтибарлап ҡарап йөрөнө — һәр ерҙә таҙалыҡ, тәртип. Тыуған ауылындағы тормош бындағынан ныҡ айырыла ине. Шунан күңелендә теге шиге тауыш бирә: бәлки, ысынлап та, был — атаһының тыуған илелер? Олоғайып, йәшәп яталыр ошо тирәлә, йәки дөйөм мобилизацияға эләгеп, ҡаршы һуғышып йөрөйҙөр... Юҡ, хыянатсыл уйҙар башына йонсоғанлыҡтан, арығанлыҡтан, һуғыштың әшәкелеген ҡабул итмәүенән киләләр. Уйлай-уйлай ҙа, аҡылы хистойғоларын бер килке урынына ултыртҡас, “буш хәбәр, барыһын да Шәрәф үҙе уйлап сығарған ләстит кенә” тигән фекергә килә...

Бер ваҡыт Оскар-Ғәскәрҙең үҙен осраттым тип уйлап, Мәхмүт бер иҫәрлек ҡылды. Ҡенигсбергтан һуң Балтикаға сыҡтылар ҙа, немецтар тылға десант төшөрә ҡалмаһын тип, яр буйындағы ҡомлоҡта окоптар ҡаҙып диңгеҙҙе күҙәтә башланылар. Төндәрен яр буйлап патруль йөрөй, күрше полк биләгән ергә тиклем тулҡын бәреп ҡатырған яр ситенән һыбайлы хәрәкәт тә туҡтамай. Диңгеҙ яғынан һалҡын ел иҫә, быҫҡаҡ ямғыр яуа. Өшәнес. Бына бер көн ныҡ ҡына өшөп, ҡом ҡалҡыулыҡтары яғына боролғайнылар, тәҙрәһенән һүрән генә яҡтылыҡ күренгән бер йортҡа төртөлдөләр. Ҡарағайҙар араһындағы яңғыҙ йортҡа инделәр. Өҫтәл артында өсәү — оло йәштәрҙәге ир, ике ҡатын киске ашҡа ултырған. Улар совет ғәскәрҙәренең диңгеҙ ярына сығыуҙарын, әлбиттә, яҡшы белә. Төндә килеп кергән һалдаттарҙы күреү менән ҡурҡып урындарынан торҙолар. Йөҙҙәре ҡатып ҡалды, ҡараштарына һағайыу ятты.

Әҙ-мәҙ немецса һупалаған сержант Андреев өйҙәгеләргә ниҙер әйтте. Тегеләр урындарына ултырҙы, олораҡ ҡатын күрше бүлмәгә сығып, сәйнүккә оҡшаған бейек ҡашығаяҡ, сынаяҡтар алып инде лә һалдаттарға сәй ҡойҙо. Егеттәр күңелләнеп китте, Петухов күҙҙәрен майландырып йәш немкаға ҡарай башланы, сынаяҡтан балғалаҡ менән май алды (һуңынан уның маргарин икәнен белделәр), немка һоро икмәкте һындырып, Петуховҡа һондо.

— Өйрән, ауыл малайы, — тине Андреев.

Ошо мәл Мәхмүт өҫтәл янына килеп, немец ҡартына мөрәжәғәт итте:

— Исемең нисек? Оскар түгелме? — русса һораны. Немец аңланы ла яуапланы:

— Meine name ist Jogan Schulz Jogan.

— Айн-цвай-драй, — тине Мәхмүт. Немец йәнә аңланы һәм былай тине:

— Kein Soldat!

Мәхмүт башҡортса йәнә бер нисә һүҙ әйтте, аҙаҡтан әсе генә итеп һүгенеп ҡуйҙы. Быныһына немец яуап бирмәне.

Өйҙән сығып юлдарын дауам иткәс, Петухов:

— Юнысов, һин немец менән ниндәй телдә һөйләштең? — тип һораны.

— Мин уны башҡортса һүктем.

— Ни өсөн?

— Нисек “ни өсөн”? Уның улы, бәлки, беҙҙең менән һуғышып йөрөйҙөр?

Померанияла йәнә бер ҡыҙыҡ хәл булды. Немец ҡатыны менән... Әллә ни ҡаршылыҡҡа осрамай, ҙур булмаған ҡаланы алдылар. Эскадрон ҡала ситендә урынлашты. Эргәлә — кирбес торбалы ниндәйҙер завод ишараты, ат һарайы, бер ҡатлы оҙон барак. Эшселәрҙең дөйөм ятағы икән. Саҡ ҡына арыраҡ — башы тимер ҡалай менән ябылған ике ҡатлы йорт. Шунда барып етеүҙәре булды, яулыҡтарын ауылса бәйләгән ҡатын-ҡыҙҙар бараҡтан йүгерешеп килеп сыҡты ла шаулашырға, русса нимәлер һөйләргә кереште. Бындай хәлдәр немец ерендә йыш ҡына булып тора ине. Полк ниндәйҙер ауыл йәки хуторға урынлашыу менән Германияға ҡыуып килтереп эшкә ҡушылған кешеләр йүгерешеп сыға ла: “Ур-ра, беҙҙекеләр килде! Туғандар, ҡәҙерлеләребеҙ, оҙаҡ көттөк, рәхмәт”, — тип ҡаршылай. Шатланып, өмөтләнеп, һағынып ҡарайҙар, шул уҡ ваҡытта һағайыу ҙа бар йөҙҙәрендә — беҙҙекеләр нисек ҡабул итерҙәр, тип уйлайҙар. Немецтарға эшләп йөрөйҙәр, ни тиһәң дә.

— Был ниндәй торба, бында нимә? — тине һәр ваҡыттағыса һуҡмыш старшина Мурашко ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарап. Лейтенант Ҡуваев яралanғас, уның вазифаһына әлеге Мурашко тәғәйенләнгәйне.

— Ҡонсерва заводы, — тип яуапланы башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙан айырылыбыраҡ торған бер йәш ҡатын. Башында яулығы юҡ, модалы пальто кейгән, үҙен башҡаларға ҡарағанда ярайһы уҡ иркен тота.

— Һин кем, немкамы әллә? — тип ҡыҙыҡһынды старшина.

— Юҡ, тәржемәсе.

— Тәржемәсе тиһең инде? Тимәк, консерва заводы. Ул консерваларҙы беҙ ашай алабыҙмы?

— Хужабикәнән һорағыҙ, — тип яуапланы әлеге ҡатын.

— Ә, хужабикәнән... Ну-ну...

— Фрау Герта, — төркөмдән берәү һүҙ ҡыҫтырҙы. — Йыртҡыс, ҡанһыҙ нәмәкәй, торғаны бер фашистка.

— Ул беҙҙе ҡамсы менән ярҙы. Гел “Арбайтен, арбайтен, русиш швайн” тип әрләне, — тине өсөнсө ҡатын.

— Ҡайҙа инде ул хужабикәгеҙ?

— Ана тора йорто, икенсе ҡатында йәшәй.

— Мине шунда алып барығыҙ әле.

Ҡатындар тулҡынлана төштө, бер-береһенә ҡарашып, геүләшеп алдылар.

— Һеҙ уға теймәгеҙ инде, — тине хужабикәне ҡанһыҙ фашист тип атаған ҡатын.

— Ул һине ҡамсы менән ярған, ә һин йәлләп тораһың, — тип аптыраны Мурашко.

— Йәлләмәйем. Һуңғы ваҡытта беҙ эшләмәнек, эшләмәһәк тә, ул беҙҙе ашатты.

— Ҡайтҡанда егеүле ат бирергә вәғәҙә итте, — пальтолы ҡатын йәнә һүҙ ҡыҫтырҙы.

— Тиһә ни? Хәҙер беҙ уны аҫып ҡуябыҙ, — старшина эре тештәрен ыржайтып йәмһеҙ көлдө.

Мурашко йортҡа ыңғайланы. Бер аҙҙан сей тиренән үрелгән һаплы ҡыҫҡа ҡамсыны ҡулында уйната-уйната фрау Гертаны эйәртеп әйләнеп килде. Ҡалын һары сәстәре түбәһенә урап өйөлгән, зәңгәр күҙҙәрен ҡайҙалыр ситкә йүнәлткән тәпәш буйлы ҡатын юбка, блузка, жакет кейгәйне. Күрәһең, саҡырылмаған ҡунаҡтар пәйҙә буласағын алдан уҡ белеп-һиҙеп, шулай рәсми кейемгә төрөнгән.

— Хужабикә беҙҙе ҡамсы менән һуҡтырҙы, тип һин әйттеңме? — тине старшина төркөмдәге ҡатындарҙың береһенә.

— Эйе, һеҙҙең ҡулдағы ҡамсы менән.

Мурашко уға ҡамсыны һондо:

— Мә, хәҙер уны үҙең яр!

— Ой, юҡ! Хужабикәгә нисек һуғаһың? — ҡатын ҡурҡып артына сигенде.

— Бында хәҙер һин хужа! Әйҙә!

Ҡатындар һүҙһеҙ ҡалды, артабан ни булырын көтөп һағайышты.

— Теймәгеҙ, уның ғәйебе юҡ.

— Ә һеҙҙең ниндәй ғәйебегеҙ бар ине? — Мурашко пальтолы ҡатынға төбәлде. — Һеҙҙе ни сәбәпле һуҡтырғанын һора.

Немка менән хәбәрләшеп алғас, тәржемәсе былай тип яуапланы:

— Улар ялҡау һәм бурҙар, ти.

Ҡатындар өндәшмәне, бераууҡ һүҙһеҙ торғас, өлкәне һағышлы ғына итеп әйтеп ҡуйҙы:

— Көн дә ун ике сәғәт буйы бил бөктөк...

— Күрәһегеҙме, ул һеҙҙе кешегә лә иҫәпләмәгән, ҡол хәлендә эшләткән, ә һеҙ уны йәлләйһегеҙ, — тине Мурашко ярһып һәм ҡамсыһын итек ҡуңысына һуғып бойороҡ бирҙе. — Взвод, баҙар тамам! Аттарығыҙҙы ҡарағыҙ. Ҡормушкаларҙа бесән бар, һолоно һуңыраҡ алырһығыҙ. — Ат һарайының ҡапҡаһына еткәс, Мәхмүтте саҡырҙы. — Юнысов, кил әле!

Мәхмүт старшина янына ашыҡты. Ҡатындар таралышты, ә фрау Герта ҡаҡҡан бағана кеүек һаман урынында тора. Мәхмүт честь бирҙе, Мурашко иһә ҡамсыһы менән немкаға төртөп бойорҙо:

— Быны тегендәрәк алып кит тә...

Ун һигеҙ йәшенә тиклем русса бөтөнләй белмәгән ауыл дегәнәге, ике-өс һүгенеү һүҙенә саҡ өйрәнгән башҡорт егете был һүҙҙең мәғәнәһен төрлөсә аңлай ала ине: ат, үлтер... Ә ниңә быны тап Мәхмүт атҡарырға тейеш һуң? Взводта унан башҡа ла башкиҫәрҙәр бар. Уларҙың күбеһе күҙ ҙә йоммай курокка баҫасаҡ.

Командирҙың бойороғон тикшермәйҙәр, ҡабатлап һорамайҙар, еренә еткереп үтәйҙәр. Мәхмүт карабинын яурынына ташланы ла ҡатынға ымлап бойорҙо:

— Ком!

Немка кәүҙәһен тура тотоп, тәкәббер ҡиәфәттә ҡабаланмай ғына атлап китте. Һары сәс остары дүңгәләкләнеп аҡ муйынында һелкенә, тулы боттарын ҡаплаған һоро юбкаһы ят ҡәүем булған, ят телдә һөйләшкән, икенсе диндә торған ҡатындың ылыҡтырғыс серен йәшерә.

Мәхмүт унан саҡ ҡына арттараҡ бара, ә башын көсөргәнешле уйҙар быраулай. Ә ниңә иҫерек Мурашконың бойороғо буйынса ҡатынды атырға тейештәр һуң әле? Эйе, милләте дошман, әммә ҡатын кеше, гүзәл зат, һалдат түгел дә. Унан килеп, был фрауҙы ниңә тап Мәхмүт үлтерергә тейеш?

Ниндәйҙер төҙөлөш-ҡаралтының кирбес стенаһы артында таҡта ҡойма һуҙыла, көтөү йөрөр туғай яҡлап япраҡ яра башлаған тирәктәр үҫә, ҡойма менән

стена араһында яҙғы ҡояш йылытҡан ерҙә йәшел үләндәр баш ҡалҡытҡан. Ауылдағыса бында ла яҙ һулышы бөркөлә, ер еҫе, йәш үлән еҫе танауҙы ҡытыҡлай. Турғайҙар сырҡылдаша, күгәрсендәр гөрләшә... Яҙҙың матур һәм серле бер мәле.

Мәхмүт һуғышта байтаҡ мәхшәрҙәр күргән ысын яугир хәҙер. Һуңғы алышта өс фрицты теге донъяға оҙатты, әммә яҙғы йәмле көндә бынау йәш ҡатынды үлтереү — ҡырағайлыҡ.

— Стой, хальт! — тип бойорҙо ул. Немка уға йөҙө менән боролғас, Мәхмүт кирбес стенаға ымланы (ошо урынды, ошо ҡыҙыл кирбес стенаны ғүмер буйы онота алмаясағын Мәхмүт әлегә белмәй ине). Фрау стенаға яҡынайҙы һәм көтмәгәндә юбкаһын өҫкә тартты ла үләнгә һуҙылып ятты. Мәхмүт был хәлгә аптырап ҡалды, хатта ҡурҡып китте. Үҙе ниңәлер Мәхмүткә түгел, өҫкә ҡарай, зәңгәр күҙҙәрендә бер ниндәй ҙә тойғо юҡ. Әйтерһең, буш зәңгәр күк уның күҙҙәрендә сағыла.

Ҡатындың көтөлмәгән ҡыланышынан юғалып ҡалған Мәхмүт нишләргә белмәне — ерҙә ятҡан ҡатынды ата алмай бит инде. Быға тиклем бер тапҡыр ҙа ҡатын-ҡыҙҙы татымаған малай эштең былдай боролош алыуына әҙер түгел ине. Икеләнеп тороуы үҙенең асыуын килтерҙе.

— Встать! — тип һөрәнләне ул, уңайһыҙ хәлдән тиҙерәк сығырға теләп. — Ауфштайн!

Немка ҡалҡынды ла юбкаһын ҡаҡҡыланы.

— Бар, кит, — тип ишараланы Мәхмүт.

Немка яй ғына ҡуҙғалды. Яурындарының көсөргәнешле бөрөшөүенән арҡаһына пуля ҡаҙалырын көткәне күренеп тора, һәм Мәхмүт атты — күккә. Теге яй ғына әйләнде.

— Них шисен!— Мәхмүт йәнә ҡулын һелтәне. — Бар, бар, атла!

Взводҡа әйләнеп килгәс, немка тураһында бер кем дә һораманы. Әйтерһең дә, ул булмаған, Мәхмүт уны атырға алып китмәгән.

Шулай ҙа Мәхмүттең татыған беренсе ҡатыны барыбер ҙә немка булды. Еңеүгә тиклем күп тә ҡалмағайны инде, бер ҡалаға былай ғына, ҡыҙыҡһыныуы еңеп, бәлки трофей булмаҫмы тигән өмөт менән бер фатирға инде. Ҙур, таҙа бүлмәләге диванда йәтеш кенә итеп йәш ҡатын ултыра. Өҫтөндәге еңел пальтоһына, башындағы беретына ҡарағанда, ҡасып килеп ингән йәки ҡайҙалыр сығырға йыйына. Мәхмүткә йәш немкаларҙың барыһы ла сибәр күренә ине, ә был ифрат та һылыу, ҡәһәрең. Ғәжәп, тегеһе бер ҙә ҡымшанманы, ҡурҡманы, ә йылмайҙы.

— Ниңә тексәйҙең? — тине Мәхмүт. Нишләһен, ҡатын йылмайғас, үҙе лә йылмайҙы.

Немкаға ҡарата уның бер ниндәй ҙә дәғүәһе лә, ниәте лә юҡ ине, матурлығына һоҡланып ҡарап тороп тороп ҙа сығып китер ине. Әммә сибәр немка уның дорфа һорауын бойороҡ тип аңланы шикелле, ҡабаланмай ғына беретын, унан пальтоһын һалды... Беренсе тапҡыр һөжүмгә күтәрелгән йәш һалдаттың дарҫлаған йөрәге кеүек, Мәхмүттең дә йөрәге ҡупты, шинелен нисек сисеп ырғытҡанын, карабинын ҡайҙа быраҡтырғанын да иҫләмәй, итекле көйө йәш ҡатынға табан атланы...

Аҙаҡ немецтар ҡалдырған казармаларға урынлашҡан эскадронына ҡайтып еткәс, ҡапыл иҫенә төштө: “Вәт, дүрәк, исмаһам исемен дә һорамағанмын”. Бер сәғәттән “По коням!” тигән бойороҡ яңғыраны. Ҡала урамынан үткән саҡта таныш йорт тәҙрәһенән һылыу ҡатындың йөҙө күренеп ҡалғандай булды...

* * *

Сержант Юнисов Мәхмүт 1946 йылда демобилизацияланды. Ауылда аслыҡ, колхоз бөлгөнлөккә төштө, булдыра алһаң, берәй ҡалаға барып эшкә урынлаш, тип яҙҙы һеңлеһе. Ҡайҙа урынлаша инде? Унаң өсөн паспорт кәрәк. Ә паспорт юллар өсөн ҡайҙалыр теркәлеү зарур. Шулай итеп Эльбаға ҡәҙәр барып еткән, байтаҡ ер-илдәрҙе күргән Мәхмүт үҙенең тауҙар араһындағы ярлы ауылына әйләнеп ҡайтты. Йөҙө ҡарайған, ҡартайған, сүккән әсәһе уны ҡосаҡлап: "Ҡайттыңмы, улым?" — тип кенә әйтә алды. Һеңлеһе тамам үҫеп еткән, бөгөндән кейәүгә бирерлек.

— Ой, ағай, һин ниндәй ҙур, бөтөнләй икенсе, был орден-миҙалдарың менән берәй ерҙә күрһәм, валлаһи, танымаҫ та инем, — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе ул.

Атаһы МТМ-ла эштә ине. Баҡһаң, баҡса артындағы тимерлек янған, өрҙөргөс, һандал, башҡа кәрәк-яраҡты сығарып өлгөргәндәр. Янғындан һуң тимерлекте мастерскойға күсергәндәр. Атаһы әле лә эшләп йөрөй икән. Мәхмүт шунда китте, сүгеп, бәләкәй генә булып ҡалған атаһын ҡосаҡланы, атай есен кинәнеп еҫкәне. Улына һыйынып, атаһы илап ебәрҙе.

Ҡайҙандыр немец өҫтәленән һыпырып алынған трофей ашъяулыҡ менән ҡул сәғәтенә шат булдылар. Һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Яңылыҡтар күп ине. Рәхмәтулла ағайға похоронка килгән. Ҡаҙағстандан ниндәйҙер белешмә артынан Миша Мордасов ҡайтып киткән. Беҙҙең телде онотмаған, класташтарын осратҡас, хатта илаған. Юнисовтарҙан өс өй аша йәшәгән Абдулхай ҡырҡ дүртенсе икмәкһеҙ йылда тәүҙә үҙҙәренең этен, унан йәнә бер нисә этте һуйып ашаған. Һуңынан уҡ-һаҙаҡ эшләп, болан атам, тип киткән дә юғалған. Урманда һөйәктәрен ярты йылдан һуң ғына тапҡандар. Ә иртәнсәк үҫмер сағында йоҡлап йөрөгән, ҡулдан эшләнгән ағас карауатында әтәс ҡысҡырыуына уянды ла, ауылдан бер ҡайҙа ла китмәйәсәген, бар ғүмерен ошонда йәшәйәсәген аңланы Мәхмүт.

Бер аҙна ял иткәс, Мәхмүт атаһы янына тимерлеккә сүкешсе булып эшкә сыҡты. Элекке сүкешсе йыш ҡына эскән, ә унан башҡа көслө ир ауылда юҡ — барыһы ла йә зәғиф, йә яралы. Ә эш күп, баш күтәрерлек тә түгел. Техника юҡ тиерлек, булғаны ла иҫке лә емерек, күп деталдәрҙе яңынан яһарға тура килә. Уларҙы тик Юнисов Рәхим — әсир немец Оскарҙың уҡыусыһы ғына эшләй ала.

Тире алъяпҡыс, брезент бейәләйҙәр кейеп, Мәхмүт ике йыл дауамында һәр иртәлә һандал алдында торҙо, ап-аҡ итеп ҡыҙҙырылған тимерҙән атаһы заводтан көтөп ала алмаған деталдәр яһаны. Ошо эше ғүмерлектер, тип уйланы...

Бер ваҡыт уны колхоз рәйесе Мәүлитов Рамазан идараға саҡырып алды ла көтөлмәгән хәбәр менән шаңҡытты:

— Юнисов, тимер-томор менән көрәшеүең етте, давай, ферманы ҡабул ит!

— Нисек инде... ферманы? Юҡ, булмай, минең эш түгел ул! — тине аптыраған Мәхмүт, тәҡдим ителгән эштән ҡырҡа баш тартып.

— Теләмәйһеңме? Мин барайыммы ни? Ҡемгәлер колхозды һаҙлыҡтан тартып сығарырға кәрәк тәһә. Мин баш тартһам, һин баш тартһаң, ул баш тартһа, — ул ҡаршыһында ултырған Шәрәфкә төртөп күрһәтте, — ул сағында нимә килеп сыға?

Колхозда парторг булып эшләгән Шәрәф һүҙгә ҡушылды:

— Юнисов, ниңә партияға инмәйһең?

— Белмәйем. Ул турала уйлағаным юҡ. Минең эш — сүкеш һелтәү.

— Уйла. Мин һиңә рекомендация бирермен. Рамазан да баш тартмаҫ.

Шәрәф галифе салбар кейә, өҫтөндә — кемдәндер һалдырып алынған ҙур пинжәк, эшләпә.

— Ниндәй егет! Һинеке һымаҡ буйым булһа, күптән обкомда ултырыр йә генерал булыр инем. Ә һин сүкеш тиһең...

— Ҡемгә ниндәй буй бирергә кәрәклеген Хоҙай ғына белә. Һин үҙеңдең буйың менән обкомды ла уҙып китерһең әле.

— Эйе, бирешергә иҫәп юҡ былай.

Мәхмүт үҙе күргәне юҡ юҡлыҡҡа, әммә ғәрип Шәрәф зифа буйлы, ифрат һылыу ҡыҙҙы алған, ҡунаҡта эсеп иҫерһә, ҡатыны уны күтәреп алып ҡайта икән, тип тә һөйләйҙәр.

— Давай, ал ферманы, — тип ҡабатланы Мәүлитов. — Юғиһә унда бардак, комбикорманы көмөшкәгә алыштыралар, малсылар гел иҫерек. Мәрүәнде эшенән төшөрөп, иртәгә һине хужалыҡ менән таныштырам. Сүкешеңде Ғарифҡа бирербеҙ. Эсеп китһә, берәйһен табырбыҙ.

Тормошоноң ауыр көндәре башланды Мәхмүттең. Ҡешеләр менән эшләү — сүкеш менән һандалға һуғыу түгел. Бында буйың да, көслө тауышың да, өс ҡатлы һүгенеү ҙә ярҙам итмәй. Ҡайғынан, ауырлыҡтан баштары ҡатҡан тол ҡатындарға, ирһеҙ һарғайған ҡыҙҙарға бер һүҙ әйтһәң, улар биш һүҙ менән яуаплай. Бына ҡайҙа ул коммунизм мәктәбе. Шулай ҙа тырышты Мәхмүт. Быҙауҙар торған бүлектең серегән иҙәнен алыштырҙы, тәҙрәләргә быяла ҡуйҙы, ҡыйыҡты ремонтланы, йәйге көтөүлектә һауынсылар өсөн йорт ултыртты. Бурҙарҙы, эскеселәрҙе оялтҡанын оялтып, әрләгәнен әрләп ыҡҡа килтерҙе. Етәкселәр фермалағы ыңғай үҙгәрештәрҙе күреп ҡәнәғәт булды, маҡтаны, хатта район етәкселеге лә эшен күрҙе, әммә был дошмандарын арттырҙы. “Уны немец тиҙәр бит, — тип һөйләнделәр артында. — Беҙ уларҙы еңдек, ә ул, ҡәбәхәт, беҙҙең тылға килеп инде”.

Ферма мөдире булып эшләгән йылдарҙағы бер ваҡиға күләгә кеүек эйәреп йөрөп, башҡаларына ла тәьҫир итте.

...Йәйге фермаға барғайны. Атын бәйләп, бытовкаға инде. Һыйырҙар, көтөүсе туғайҙа ине. Һауынсыларҙың ҡайһылары еләккә киткән, ҡайһылары ауылға ҡайтҡан — иртәнге һауындан һуң бында нишләп ултырһындар инде. Дежурҙа Асия ҡалған. Әллә ни сибәр тип тә әйтеп булмай, бөтөнләй йәмһеҙ ҙә түгел. Тулы кәүҙәле, киң битле, ирҙәрсә киң яурынлы һәм ҡыҫҡа муйынлы был ҡыҙ, көр тауышлы, әсе телле башҡа ҡыҙҙар менән сағыштырғанда, тыныс, өндәшмәҫ, бар нәмәне яуапһыҙ ғына ҡабул итә торған зат ине.

Үгәй әсәй менән үҫкән, тегеһе ҡыҙҙы гел кәмһеткән, туҡмаған, тип һөйләйҙәр. Ҡемгәлер кейәүгә сығырға өмөт-мөмкинлеге юҡ. Һуғыштан һуң үҫеп еткән йәш егеттәр өсөн ул ҡарт, ә фронтовиктар, Мәхмүттән башҡалары, ғаиләле. Мәхмүт шуныһын да шәйләп йөрөй: тап булышһалар, Асия уға нисектер йылмайып ҡарай, йөҙө асыла, ҡарашына моңһоулыҡ, серлелек яғыла. Юҡ, оялсан йәки ҡыйыуһыҙ түгел был ҡараш, түрәләргә баҡҡан тоғро, буйһоноусан ҡараш та түгел, ә мәғәнәле. Әйтерһең дә, нимәлер көтә, өмөт итә, һүҙһеҙ генә һорай...

Һуғышҡа тиклем ул Мәхмүткә бер аҙ оҡшай ҙа ине. Хатта ошондай яҙыу ҙа ебәргәйне: “Һин миңә оҡшайһың”. Фронттан хат та яҙып ҡараны, тик яуап булманы.

...Асия иҙән уртаһында баҫып тора, Мәхмүткә ҡараған да ҡатҡан. Йәшлек йылдары иҫкә төшөп, Мәхмүт ҡыҙҙы ҡосағына алды һәм дәртенә ирек ҡуйҙы...

— Хәҙер нимә була инде? — тип һораны Асия аҙаҡ.

— Белмәйем, — тип яуапланы Мәхмүт яурындарын һикертеп һәм ишеккә йүнәлде. Ҡәрәкмәҫ ине, хата булды, тигән шикле уй ҙа яралды күңелендә.

Һыйырҙар ҡышҡы һарайға ҡайтҡас, Мәхмүт ҡыҙ менән йәнә тап булышты. Быҙауҙарҙың йәйге кәртәһе янынан үтеп бара ине, лапаҫ аҫтында Асия баҫып тора. Ишетелер-ишетелмәҫ иҫәнләште лә уға ҡарап текәлде. Сәйер ине ҡарашы. Барайыммы икән янына, тип ынтылғайны ла, юҡ, былай ярамай, миңә өйләнергә кәрәк, тик уға түгел тип, кире уйланы.

Институттан һуң ауылдарында немец телен уҡытҡан уҡытыусы ҡыҙҙа ине күңеле. Һылыу, сөм ҡара сәсле, һоро күҙле, ыҫпай кейенә. Мәхмүт уның менән һабантуйҙа танышҡайны. Байрам тамамланып, ауылға ҡайтышлай бергә тура килделәр.

— Һеҙҙең исемегеҙ нисек? — тип һораны Мәхмүт.

— Ҡлара.

— Ҡлара? Немец исеме икән.

— Ҡлара Цеткин. Атайым коммунист ине, шуға ла миңә әлеге исемде ҡушҡан. Мәктәптә үк Гетены уҡый торғайным.

Үҙенең тәүге мөхәббәте — Германиялағы немканы хәтерләп, Мәхмүт былай тине:

— Ауылда мине немец тип йөрөтәләр. Әйҙәгеҙ, сығыгыҙ миңә кейәүгә, немец ғаиләһен ҡороп ебәрәйек.

Ҡлара көлдө лә һораны:

— Ниңә, һеҙ, ысынлап та, немецмы ни?

— Юҡ, әлбиттә. Минең нәҫел етенсе быуынға тиклем башҡорт.

Мәхмүт уға йола буйынса яусылар ебәргәйне, Ҡлара риза булды...

* * *

Бәхетле ғаилә тормошоноң өсөнсө йылына, хәҙер ул ике малайға атай ҙа ине, яңы йорт та һалып кергәйне, ауылға ҡайғы килде: йөрәк өйәнәгенән колхоз рәйесе Рамазан Мәүлитов вафат булды. Хужалыҡты һуғыш йылдары емереклектәренән алып сыҡҡан етәксе һаулығын юғалтҡайны. Уны ерләгәндән һуң бер нисә көндән райкомға саҡырҙылар ҙа әйттеләр:

— Юнысов, һыйыр ҡойроғон бороп йөрөү етте һиңә, давай, колхозды ҡабул ит!

— Минән башҡа кеше юҡмы ни?

— Эҙләмәнек тә. Әйҙә, Аллаға тапшырҙыҡ.

Был вазифаны алғанда "Маяҡ" колхозы яйлап булһа ла аяғына баҫып килә ине инде. Бер нисә йыл рәттән яҡшы уңыш йыйып алдылар. Һәр тинде экономиялап, ун йыл арауығында пилорама ҡороп ултырттылар. Мәҙәниәт йорто, яңы мәктәп, гараж һәм техникаға япма төҙөнөләр. Тимерсе Рәхим улы Мәхмүт тиҙ арала районда ихтирамлы, абруйлы кеше булып китте. Тышҡы ҡиәфәте лә үҙгәрҙе: кәүҙәһе ҡалынайҙы, олпатланды, күп һөйләшмәне, ҡул аҫтындағыларға бер ҡасан да тауышын күтәрмәне. Алдағы йылдарҙа уның район масштабындағы етәкселеккә үрләйәсәген күҙалларға була ине.

Был йылдарҙағы уңыштар һәм ҡыуаныстар шунан ғибәрәт: һуңлабыраҡ булһа ла, һеңлекәше тормошҡа сыҡты, өлкән улы университетҡа уҡырға инде, бәләкәйе лә үҫеп килә. Уныһының уҡырға әллә ни барымы күренмәй, тәмәке

менән шаярғаны ла һиҙелә. Шуныһы — ул урамда йыш ҡына сәйер бер малайҙы күргеләне. Өйөнән идараға барғанда йәки ҡайтҡанда был малай ҡаршыһына осрай ҙа текәлеп ҡарап тора. Ҡарашы ла нисектер сәйер: әллә Мәхмүт иғтибар итер, һүҙ ҡушыр тип көтә, әллә нимәнәндер ҡурҡа. Әммә үҙе бер ҡасан да исәнләшмәй, һүҙ ҙә әйтмәй.

— Нишләп оло кеше менән исәнләшмәйһең? — бер көн үҙе һүҙ ҡушты Мәхмүт.

— Исәнләшкем килмәй! — тине малай тупаҫ ҡына һәм шәп-шәп атлап китте.

Егет ҡорона ингәс тә теге малай әүәлгесә исәнләшмәне, ят кешегә ҡараған кеүек ҡарай ҙа үтә лә китә ине. Бер мәл бөтөнләй күренмәй башлағас, Мәхмүт, теге сәйер малай ҡайҙа юғалды ул, әллә армияға алдылармы, тип ҡыҙыҡһына ҡуйҙы. Яҙа-йоҙа ишетте: баҡһаң, ҡалала кемдеңдер мотоциклын урлап алып киткән дә тотолған, төрмәгә ултыртып ҡуйғандар икән. Бер йыл самаһынан ҡайтты, Мәхмүткә тап булһа, ҡарашын ситкә алды, исәнләшеп тә тормай үтеп китте. Мәхмүт уны исерек көйө лә күргеләй.

Байтаҡ йылдар элек осраҡлы ғына гонаһ ҡылған Асияның улы икәнен белгәс, Мәхмүт егетте эскелектән тамам көс-хәле бөткән Ғариф урынына тимерлеккә урынлаштырҙы. Ҡупмелер ваҡыттан һуң атаһы Мәхмүткә:

— Ал минән Русланды, эшкә эсеп килә лә яҙа һуға, — тине.

Һуғыш ветераны, алдынғы колхоз рәйесе Мәхмүт Юнысовтың уңышлы һәм шатлыҡлы йылдары шулай бер-бер артлы үтә торҙо. Ике һауынсы менән Мәскәүгә, Халыҡ ҡаҙаныштары күргәҙмәһенә барып ҡайтты, орден бирҙеләр, яңы гаражда ике йөк машинаһы тора. Бәләкәйе, Ринат, армиянан ҡайтты. Музыкаға һәләте асылды, баян алып бирергә тура килде. Район үҙешмәкәр концерттарында ҡатнаша башланы, райондар буйлап йөрөнө һәм үҙен артист тип хисаплай ине. Уға яңы йорт һалдылар. Ринат күрше ауылдан йәш кәләш алып ҡайтты. Унан ҙур шатлыҡ — ейәндәре тыуҙы. Уның “олатай” тигән нәҙек сағыу тауышынан Мәхмүттең йөрәге шатлыҡ менән тула.

* * *

Ололар әйтмешләй, тормош — ҡуласа. Ниндәйҙер билдәләр, ым-ишара килер бәлә хаҡында кешене иҫкәртә. Әммә кеше быға бөтөнләй битараф, иҫкәртеүҙәргә һаңғырау, үтер, миңә ҡағылмаҫ, тип уйлай.

Ринат башҡа сығып үҙ өйөндә йәшәй башлағас, әлеге егет, Руслан, уға йышлай башланы. Әллә ни әһәмиәт бирмәне Мәхмүт — оҡшай икән, инһен әйҙә, йөрөтмә шуны, тип тыя алмай бит инде. Иң мөһиме — эсергә өйрәнеп китмәһен.

Бер көн улы Мәхмүтте тамам шаңҡытты:

— Атай, Руслан, мин — һинең ағайың, ти.

Мәхмүт тәүҙә был хәбәргә нимә тип яуапларға ла белмәне, байтаҡ ҡына өнһөҙ торғас:

— Ул эскесе менән аралашһаң, тағы әллә нимәләр ишетерһең әле, — тине.

Ә үҙе уйға батты: булыуы мөмкин түгел. Ул малайға нисә йәш һуң?

Торараҡ Руслан эскән килеш урамда тап булды ла еңенә йәбеште.

— Председатель, туҡта, тыңла, һин минең әсәйҙе ауырға ҡалдырғанһың, әлимент түләмәнең. Давай, бер шешәлек аҡса бир әле.

Мәхмүт ҡулын ҡапыл тартып алды ла шәп-шәп атлап китеп барҙы. Тамам кәйефе ҡырылды, асыуы алҡымына тығылды. Күңеле менән тормошонда ошо

көндән ҡара осор башланғанын һиҙемләне. Эйе, ҡайғы оҙаҡ көттөрмәне — атаһы үлде. Махорка төтөнө менән ыҫланған, тимерсе өрҙөргөсөнөң уты менән яндырылған үпкә шулай итеп тын алыуҙан туҡтаны. Мәйетен йыуып кәфенгә төргәнсе атаһының бәләкәй генә кәүҙәһе эскәмйәлә ятҡанда, Мәхмүт уның сәсһеҙ ҡалған башынан һыйпаны ла ғүмерендә беренсе тапҡыр иланы.

Ҡышты имен-аман сыҡтылар. Хәйер, имен-аман тип атап булһа. Күршелә йәшәгән улына теге эскесе Руслан тамам оялап алды. Өйҙә ҡайсаҡ төн уртаһына тиклем баян, иҫерек ҡатын-ҡыҙ тауышы яңғырап торҙо. Етмәһә, Ринатты туйҙарға саҡырҙылар. Хатта күрше колхоздарҙан килеп алалар. Ауылда, егет эскесегә әйләнә инде, харап була, тип һөйләнеләр. Хәлде самалап, ейәндәре Артурҙы хәҙер Мәхмүт йәшәргә үҙҙәренә алырға мәжбүр булды.

Ошондай ғаилә күңелһеҙлектәренә ҡарамай, дөйөм тормош алға барҙы, колхоз аяҡҡа баҫты, Мәхмүт үҙен дә ерҙә ныҡ баҫып торам, тип иҫәпләне. Әммә, боронғолар әйтмешләй, дүрт аяҡлы ат та абына. Мәхмүт үҙенең ауылса ябайлығы, кешегә ышанғанлығы арҡаһында абынды. Был холҡо атаһы Рәхимдән күскәндер.

“Маяҡ” колхозының бер сиге осло ташлы тау һырты буйлап үтә — ике колхоздың ерҙәрен тәбиғи ландшафт шулай айырып тора. Тик нишләптер “Маяҡ”тың бер нисә тиҫтә гектар ере күрше колхоз биләмәһендә, йәғни әлеге тау һыртының көньяҡ яғында булып сыҡты. Мәхмүт ҡасандан бирле шулай булғанын, ерҙәренең ни сәбәптән теге яҡта ла барлығын белмәй. “Маяҡ” ул ерҙәрҙе һөрмәне лә, сәсмәне лә.

Күрше “Коммунизм юлы” колхозы рәйесе Ғилмановты ла Мәхмүт күптән белә. Районда үткән “коверға баҫтырыуҙар”ҙа йәки йыйылыш, семинарҙарҙа осрашып торалар. Бер ваҡыт Ғилманов районда осрашҡанда шундай алыш-биреш тәҡдим итте: “Беҙҙең яҡтағы анау ереңде миңә бир, ул барыбер буш ята, сәсмәйһең. Һинең былай ҙа ерең күп, унан башҡа ла күп сәсәһең, ә техникаң етмәй. Мин һиңә ураҡ мәлендә комбайн биреп торам, етмәһә — тағы ебәрермен”.

Баҙарҙағы ише ҡулға-ҡул һуғыштылар ҙа киттеләр Мәхмүткә. Мәгәристе эскәндән һуң эш тамам да булды. Һәм бына бер ваҡыт, көҙгә ингәс, ураҡтан һуң (Ғилманов вәғәҙәһен үтәне, бер түгел, ике комбайн ебәрҙе) Мәхмүтте прокуратураға саҡырттылар. Мәсьәлә былай тора ине. “Маяҡ” колхозы рәйесе Юнысов Мәхмүт Рәхимович, партия ағзаһы, законды боҙоп, “Коммунизм юлы” колхозына шунса-шунса гектар “Маяҡ” ерҙәрен һатҡан һәм, йәнәһе, ул ерҙәрҙең аҡсаһы хужалыҡ кассаһына инмәгән. Прокурор, әлбиттә, шикәйәтте кем яҙғанын әйтмәне. Райкомдың беренсе секретары Фәтҡуллин ҡолағына төшөрҙө. Хәйер, Мәхмүт үҙе лә һиҙемләне кемдең ҡулы уйнағанын. Шәрәф! Садиҡовтар ҡапҡаһы алдында бысраҡ күләүеккә төртөп йыҡҡаны өсөн үсен алды. Ә бит мәгәристе Мәхмүт кенә түгел, ул да эсте. Үҙенең ҡәбәхәтлеген аҡлау өсөн Фәтҡуллинға: “Мин, намыҫлы коммунист булараҡ, халыҡ байлығын тәләфләүсе Юнысов ише жуликтарҙың афераларына күҙ йомоп ҡала алмайым”, — тигән. Парторг булып алғас, Шәрәф колхоздың бөтә уңыштарын үҙләштерергә әүәҫләнде.

Алға суд, хатта төрмәгә ултырыу хафаһы килеп баҫты. Мәхмүт ғүмерендә беренсе тапҡыр үҙен бүреләр өйөрө ҡамаған ат рәүешендә тойҙо. Һәр ҡатын-ҡыҙға хас булғанса, хәләл ефете был хәлгә уның үҙенән дә нығыраҡ бөтөрөндө, бит-йөҙө ҡартайып китте. Мәхмүттең тормошонда беренсе тапҡыр ныҡлап

асыуы килде, ғәҙелһеҙлектән йәне көйҙө: шундай ҡара эсле бәндәләрҙе ер нисек йөрөтә икән? Шундай мәхшәрҙәр аша үтте, Нарев янында немец минаһы үлтермәне, Ҡенигсберг эргәһендә эре калибрлы пулемет алманы, ә бынау һуғышта булмаған көнсөл, меҫкен әрәмтамаҡ ергә күмергә маташа. Юҡ, уға ғына бирешәһем юҡ! Ә Ҡлараһы тынысландырыуын белде: “Беләһеңме, Мәхмүт, тормошта ғәҙеллек барыбер еңә, ғәйепһеҙ кешеләр менән шулай ҡанһыҙ ҡыланалар икән, иртәме-һуңмы үҙҙәре яҙаһын аласаҡ. Күр ҙә тор, Шәрәфкә лә киләсәк ул көн”.

Фәтҡуллин прокурорҙы ялыуҙы “йоморға” күндерҙе. “Ундай кадрҙарҙы ултыртһаҡ, кем эшләр һуң?” Ҡадрҙар бөтәһен дә хәл иткәнен прокурор аңлай ине һәм Мәхмүттең “эшен” туҡтатты. Ә тау һыртының теге яғындағы майҙанды ерҙәре аҙ булған “Ҡоммунизм юлы” колхозына биреп, юридик яҡтан рәсмиләштереп ҡуйҙылар.

Бер аҙҙан райкомдың беренсе секретары Фәтҡуллин өҫтәленә алдынғы “Маяҡ” колхозы рәйесе Юнысовтың вазифаһынан бушатыуҙы һораған, хатта талап иткән ғариза килеп ятты. Фәтҡуллин Юнысовты әңгәмәгә саҡырҙы. Ҡыйырһытылған рәйес үҙ һүҙенән ҡайтмаған, бүтән эш тәҡдим итте.

— Районғамы? Ҡабинетҡамы? Юҡ инде, булмай. Теге эшмәкәрҙе алһағыҙ, колхозда ҡалам. Ул ошаҡсы менән бер мисәүҙә эшләмәйем.

Ә Мәхмүт алдынғы колхоздың парторгын алмаясаҡтарын яҡшы белә ине. Ҡыйыулыҡтары етмәйәсәк. Шәрәфтең бөтә район етәкселегенә, колхоз рәйестәренә һәм башҡа әҙме-күпме вазифалы кешеләрҙең барыһына ла компроматтар яҙылған ҡалын дәфтәре барлығын күптәр белә. “Тейеп-ҡағылып ҡына ҡараһындар — дәфтәрҙе обкомға, гәзит редакцияларына алып барып күрһәтәсәкмен”, — тигән.

— Тик юғалма, — тине “беренсе” тәрән көрһөнөп һәм Мәхмүттең ғаризаһына ҡул ҡуйҙы.

Мәхмүт рәнйешен араҡы менән йыуып торманы, тиҙ арала тынысланды, бығаса ҡулы етмәгән шәхси хужалығын тәртипкә килтерергә тотондо. Веранда төҙөнө, әсәһенә утын менән ярҙам итте, шунан атаһының тимерлегенә эшкә төштө. Бында бала саҡтан бөтәһе лә таныш, күңеленә яҡын: шул уҡ һандал, сүкештәр, өрҙөргөс, таныш танһыҡ еҫтәр.

Атаһының тирле алъяпҡысын кейҙе, йәш егеткә сүкеш тотторҙо, үҙе белгән, күнеккән тәмле эшенә тотондо. Ғазаптар үтте, төнөн тыныс йоҡлай башланы, оҙаҡламай һурылған йөҙө йомороланды, ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Ә төп ҡәнәғәтлеге шунда ине: бер кем дә янында тормай, бер кем дә бойормай, мәжбүр итмәй һәм психикаңа һөжүм итмәй...

Ҡөҙөн йәнә бер күңелһеҙ ваҡиға килеп сыҡты. Әллә был осраҡлы хәл булды, әллә тормош, ысынлап та, үҙенең ғәҙел закондарын боҙған әҙәм аҡтыҡтарын яҙаға тарттыра — ғазаплы үлем менән “Маяҡ” колхозының сираттағы рәйесе Садиҡов Шәрәф вафат булды.

Ауылдың күпселек ирҙәре кеүек, ул да мунсала сабынырға ярата ине, хәле бөткәнсе тигәндәй эҫе мунсала сабына ла сығып бер стакан ебәрә. Ғәҙәте шулай. Үҙе сабына, үҙе йырлай. Ҡатыны был юлы ла йырлаған-көйләгәнен ишеткән, әйҙә, иҫәрләнһен, йәнәһе, гел шулай ҡыланғас, әллә ни иғтибарға алмаған. Оҙаҡлап киткәс барһа, Шәрәф иҙәндә иҫһеҙ ята, ти. Медсестра Таһира, бәлки, ул ялған араҡы менән ағыуланғандыр, тигән. Ауыр тупрағы еңел булһын.

* * *

Бер ваҡыт көҙгө эңерҙә ейәне Артур атаһына ҡайтып китте. Ҡитте лә шундуҡ тигәндәй йүгереп әйләнеп тә килде. Инеү менән ҡысҡырып та ебәрҙе:

— Олатай, унда Руслан ағай һәм әсәйем... — Малай һүҙен әйтеп бөтөрә алманы.

Ҡлара һүҙһеҙ ҡатып ҡалды, телевизорҙан яңылыҡтар ҡараған Мәхмүт урынынан һикереп торҙо, тәүҙә өндәшә алманы, унан ауыр итеп бер нисә һүҙ һығып сығарҙы:

— Шулай бөтөрөн бelә инем, — ишеккә йомолдо, аяғына калуштар эләктерҙе, — хәҙер күрһәтәм мин уларға...

Малай олатаһы артынан эйәрергә ниәтләгәйне лә, өләсәһе:

— Артур, йөрөмә, унда һиңә барырға ярамай! — тип ҡысҡырҙы. Ире артынан ихатаға сыҡҡан Ҡлара: — Һин һағыраҡ... тейә күрмә... зинһар, — тип үтенде.

“Артист” улы өйөндә ҡараңғы ине. Әсе бал, һейҙек еҫе танауына бәрелде. Ҡараңғы, бер ниндәй тауыш та, хәрәкәт тә юҡ. Арғы стена буйындағы диванда кемдер хырылдай. Ринат йоҡлайҙыр. Ҡарауатта килене янында Русланды шәйләне. Яҡын килде лә елкәһенән ҡармап өҫкә тартты. Тегенең күлдәге йыртылды, аяғына баҫтырырға тырышҡайны ла, көсө етмәне, ҡамыр ише йомшарған кәүҙәһе иҙәнгә шыуып төштө. Мәхмүт яланғас Русланды иҙән буйлап һөйрәп ишек төбөнә килтерҙе лә, верандаға сығарып, болдорҙан төртөп төшөрөп ебәрҙе. Баҫҡыстар буйлап тәгәрәй-тубырлай ул кирбес йәйелгән ихатаға барып төштө. Тегенең кәүҙәһен ашатлап, Мәхмүт өйөнә ашыҡты.

— Нимә булған? — тип һораны тамам ҡурҡҡан ҡатыны.

— Позор!

Артурҙы ата-әсәһенә бүтәнсә ебәрмәнеләр. Ринат атаһы менән осрашыуҙан ҡасып йөрөнө. Юнысовтар ғаиләһенә ярлы йортҡа кергән иртә һыуыҡ һымаҡ көҙ бысрағы, күңелһеҙлек менән ҡара ҡайғы-хәсрәт килде. Оҙаҡламай ишетелде — йәнәһе лә, Мәхмүт туҡмаған Русландың уң яғын паралич һуҡҡан, инсульт менән больницала ята. Ул бит Русланды туҡмаманы, болдорҙан төртөп кенә төшөрҙө. Бәлки, насар араҡы эскәндер? Ә унан алкоголиктар йыш ҡына инвалид булып ҡала йәки Шәрәф кеүек ағыуланып үлә... Мәхмүт уны карауаттан ишеккә һөйрәгәнсе үк паралич бәргән булыуы ла бар.

Ҡышын Мәхмүт уны урамда осратты. Руслан аяғын саҡ һөйрәп, таяҡҡа таянып ҡайҙалыр китеп бара ине. Тапҡырына еткәс, Мәхмүткә йән өшөткөс ҡарашын төбәне, ул күҙҙәрҙе күрмәһә, күпкә яҡшыраҡ булыр ине...

Асия менән дә юлдары киҫеште. Ябай малсы тормошонан юғарыраҡ йәшәп, етмәһә, икенсе аймаҡта торғанлыҡтан, уны бер ҙә осратмай торғайны, әммә күңелендә үҙенең ҡылығы өсөн гел үкенес тойғоһо йөрөттө. Ул аяғын саҡ шыуҙырып, кәкре таяҡҡа таянып яй ғына китеп бара ине. Медпунктҡа баралыр, күрәһең. Аяҡтары йөн ойоҡтар өҫтөнән бигүк таҙа булмаған аҡ сепрәк менән уратып бәйләнгән, ҡыш булыуға ҡарамаҫтан, калуш кейгән. Башында — һоро шәлъяулыҡ, иҫке генә пальтола. Йөҙө йәш сағындағы ише бурһыҡ, әммә хәҙер сырыш һәм һалпыш.

Мәхмүт иҫәнләште лә һораны:

— Аяҡтарыңа ни булды?

— Мин һауынсы инем бит. Ҡышын да, йәйен дә резинка итектә тиҙәк кисеп йөрөнөм. Полиартрит.

Йәнәш атланылар — Мәхмүт тә медпункт яғына бара ине. Шунан ул туҡтаны ла үҙен күптән борсоған һорауын бирҙе:

— Асия, әйт әле, Русландың атаһы кем?

— Ҡем булһын, һин, — тип яуапланы ҡатын тыныс ҡына. — Минең башҡа ирҙәр булманы. Һин беренсеһе, һин һуңғыһы, — бер аҙ өндәшмәй килгәс, һөйләп китте. — Бәләкәй сағында, атайың һуғышта үлде, тип алдап йөрөнөм, үҫкәс, һине күрһәттем. Атаһы булыуын бик теләй ине. Гел генә, ниңә ул беҙгә килмәй, ниңә минең менән һөйләшмәй, тип ныҡый торғайны. Атаһы бар көйө етем үҫте инде шулай, йөрәкәсем...

* * *

Яҙға Асия үлде. Ғазаплы шик һәм икеләнеүҙәр менән яфаланған Мәхмүт, бәлки, Руслан ысынлап та минең улымдыр тип, уның янына барырға ҡарар итте. Баҡса арттарынан ғына килеп, иҫке, емерелергә әҙер бәләкәй йортҡа инде. Өй эсенең шыҡһыҙлығы, ташландыҡ хәлдә булыуы уны шаҡ ҡатырҙы. Етмәһә, тәмәке еҫе лә баҫа алмаған һаҫыҡ еҫ. Йөнө ҡойолоп бөткән бесәй сит кешене күргәс йүгереп өҫтәл аҫтына инеп китте, өҫтәл өҫтөндә — быҫраҡ кәстрүл, тәрилкә, ҡалаҡтар. Һаҫыҡ еҫтең ҡайҙан килгәнен аңланы Мәхмүт — бесәйҙе тышҡа сығармағандар. Урам яҡтылығынан һуң өй эсендәге ҡараңғылыҡҡа күҙе өйрәнгәс, һикеләге бер өйөм сепрәк-сапраҡтың һелкенеүен шәйләне. Бер аҙҙан байтаҡтан бирле ҡырынмаған, йөҙө шешенеп бөткән Русландың башы күренде лә мөгөрҙәгән тауышы сыҡты. Бына ул ҡалҡынып һике ситенә ултырҙы, тотлоға-тотлоға нимәлер әйтергә тырышты, ләкин Мәхмүт бер нәмә лә аңлай алманы.

— Нисек йәшәйһең, һаулығың нисек? — тип һораны ул, нисек йәшәгәнен, хәлен күреп торһа ла.

Руслан тәмәкенән һарғайған һирәк тештәрен күрһәтеп көлөргә, унан нимәлер әйтергә маташты, әммә аңлашылмаған өн генә сыҡты. Мәхмүт һике ситенә ултырҙы ла эскенән, сирҙән боҙолған был кешенең, бәлки, улының, йөҙөн яҡындан ҡараны. Ирекһеҙҙән, бер ҡасан да иҫерек көйө күренмәгән үҙенең өнһөҙ тимерсе атаһының, гел генә борсоулы һәм хәсрәтле әсәһенең йөҙө менән оҡшашлыҡ эҙләне. Әгәр күҙҙәре һоро, сәстәре аҡһыл булһа, бәлки, үҙе менән дә оҡшашлыҡ табыр ине...

— Былай йәшәргә ярамай, — тине Мәхмүт йәнә өй эсен байҡап. — Харап булаһың бит былай!

Руслан көсәнеп-көсәнеп йәнә нимәлер әйтергә маташты, һүҙе килеп сыҡмағас, асыуынан ҡысҡырып ебәрҙе, унан һары тештәрен ыржайтып көлдө. Һау ҡулы менән һикелә ятҡан сигарет һауытын, шырпы алды, аяҡтарын юрған аҫтынан сығарып, тубыҡтары араһына ҡыҫты ла сигарет һурып алды, тоҡандырҙы.

Мәхмүт ҡалҡынды һәм ҡәтғи рәүештә:

— Беҙгә йәшәргә бараһың! — тине.

Нисәлер секунд Руслан бер ни аңламай Мәхмүткә текәлеп ҡарап торҙо, шунан ҡапыл шарҡылдап көлөргә тотондо. Ҡырағай көлөү үкһеүгә күсте, үкһеү — һөрәнгә. Әйтерһең дә, ҡаты итеп туҡмайҙар. Ҡысҡырыуынан бер мәл туҡтаны ла мөһим һүҙ әйтергә ниәтләнеп, тотлоға-тотлоға, сәсәй-сәсәй, башын сайҡай-сайҡай мөгөрҙәргә тотондо, үҙе бер секундҡа ла Мәхмүттән күҙҙәрен алманы...

*Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.*